# <u>Сценарий</u>

## Бесән бөткәс

**Тирмә алды**. Ҡунаҡтар килә. Коллектив йыр менән ҡаршы ала. (“Ҡунаҡтар беҙгә килгәндәр”)

*Зулия, Азмат сәк-сәк, ҡымыҙ менән ҡаршы алалар.*

Ҡунаҡтар ишек алдына үтәләр. Шул ваҡытта кухня янынан бер төркөм эшселәр сәсеүҙән ҡайтып киләләр. (*Колғаға яулыҡ, таҫтамалдар эленә, Һебә йыйыусыларға хужалар таҫтамал, яулыҡ, аҙыҡ-түлек биреп сығара, шау-гөр киләләр)*

- Һаааааай сәсеү еңел булды быйыл.
- Эйее, ҡара ергә орлоҡ һиптем, көҙгә башаҡтары шаулап торһон.
- Мал-тыуарҙарыбыҙ көр булһын
- Келәттәргә уңыш тулһын.
- Илдәр имен торһон.
- Эш бөткәс, уйнарға ла ярай ти бит халыҡ.
- Эйе шул, сәскән орлоҡтарыбыҙ шыта торһон, ә беҙ уйнап-көлөп, бейеп-йырлар күңел асып алайыҡ.

УЙЫН. “**Косилка-молотилка”**

**НАЗА уйыны**

Наза, Наза,

Наза – матур ҡыҙ бала.

Наза тырыш, Наза уңған,

Наза – ударник бала.

- Йәгеҙ, кем башлай?

Бөрлөгәне түгелгән.

Көн дә «Наза» уйнағанға

Наза сыҡмай күңелдән.

**Ҡушымта:** Наза, Наза,

Наза – матур ҡыҙ бала.

Наза тырыш, Наза уңған,

Наза – ударник бала.

Сума өйрәк, сума ҡаҙ,

Тәрән күлде ярата.

Мәҙинәбеҙ пар һайлай,

Белмәйем кемде ярата.

**Ҡушымта:** Наза, Наза,

Наза – матур ҡыҙ бала.

Наза тырыш, Наза уңған,

Наза – ударник бала.

**Өләсәй**. Ярай етеп тороп уйынығыҙ ҙа. Һис кенә арыу белмәйһегеҙ. Шул тиклем эштән һуң да хәл булыр икән. Сәсеүселәргә тигән табыным да әҙер. Әйҙәгеҙ, хөрмәтле ҡунаҡтар, туғандар, дуҫ-иштәр тирмә эсенә рәхим итегеҙ.

**Тирмә ишеге алдында.**

**Аҡһаҡал:** Фатихамды бирәм, уландар!

Онотмағыҙ: был ер халыҡ өсөн,

Түгел талаш, ыҙғыш, һуғыш өсөн!

Яңғырап торһон бында бала тауыштары

Ҡоштар моңо, һабан сыңы иртә-кисен!

**Эшсе**: Рәхмәт һиңә,олатай!

Изге фатихаң өсөн.

**Йәштәр:** Һеҙҙең изге фатихала

Башаҡтар шаулап үҫер!

Игенсене данлау ҡоро

Һабантуй гөрләп үтер!

***Таҡмаҡ йырланыла:***

Бәләбәйҙә бөгөн байрам,

Бәләбәйҙә тантана!

Ихлас барған был йыйынға

Барса халыҡ таң ҡала.

Күңелле йырҙар йырланыла. (“Күләгә”)